

*Ләйсән ФАТАУЛЛИНА-ЯҠУПОВА*

# “Мин һаман да көләм әле”

## Ләйсән ямғыр

— Янам инде, бөтәм инде,
Күңелкәйемдә — янғын.
Баҫыр өсөн яныуҙарым
Һин кәрәк, ләйсән ямғыр!

— Мин баҫырлыҡ ҡына түгел,
Ай-һай янаһың, малай!
Тамсыларым төшөп етмәй
Быуға әйләнә, буғай.

Һиңә башҡа ямғыр кәрәк —
Йәшнәп яуған, көслө, ныҡ.
Ә мин — бик тиҙ үтә торған
Йылы, яҙғы ямғырсыҡ.

Әхирәттәр йыйылдыҡ та
Бүлдек йөрәк серҙәрен,
Күрешмәгән араларҙа
Баштан ниҙәр кискәнен...

«Һин көслө, сыҙамлы икән!» —
Тип һоҡлана дуҫтарым.
Был һүҙҙәрҙе һуңынан мин
Ҡабат-ҡабат уйланым.

Донъя мәшәҡәте баҫып,
Онотҡанбыҙмы инде,
Гүзәл заттың гүзәллеге
Көсһөҙлөктә икәнде.

Гүзәллекте һаҡлап ҡына
Йәшәү серен кем белә?
«Көслөһөң!» тип һоҡланмағыҙ,
Көсһөҙ булаһым килә...

***

Һуҡырҙар моңло йырлай ҙа,
Телһеҙҙәр — оҫта рәссам...
Дөрөҫ булмайҙыр, күрәһең,
Һәләткә бәхет кушһаң...

## Йәш атаның бишек йыры

Әлли-бәлли бәү итә,
Ҡыҙсығым бәү-бәү итә.
Атаһының ҡулбашында
Ул хәҙер йоҡлап китә.

Ҡояш байыған, ҡыҙым,
Әсәйең арыған, ҡыҙым,
Йоҡлап киткәнеңде көтөп,
Мин дә зарығам, ҡыҙым.

Йоҡла инде, йом күҙең,
Хоҙайым, бирсе түҙем!
Һис тә ялындырмаҫ инем,
Булалһам һиндәй үҙем.

Әлли-бәлли итһәңсе,
Йоҡлап ҡына китһәңсе...
Тиҙерәк йоҡлап китһәңсе,
Үҙем йоҡлап киткәнсе...

## Матурлыҡ сере

Ҡыҙыл күлдәк кейҙем әле,
Ҡыҙыл миңә килешә!
Яндарымда бөтөрөлөп
Кескәй ҡыҙым һөйләшә:

«Әсәйем, һин иң матуры!
Юҡтыр һинең кеүектәр!
Үҫкәс мин дә һинең кеүек
Булайымсы нисек тә?»

Матурлыҡ серен һеҙгә лә,
Ҡыҙҙар, белергә кәрәк:
Иң матуры булыр өсөн
Әсәй булырға кәрәк!

***

Ҡыш уртаһы. Яҙҙар килде
Күңелгә.
Йәнем — йылға. Йәнә таша,
Түгелә.
Ялған хистәр һалҡын һыуға
Күмелә.
Ҡаты боҙҙар йәнде китеп,
Йүгерә.
Алданаһын белә инде
Күңелем,
Был яҙҙарҙың беренсеһе
Түгелен.
Яныуҙарым йөрәктән тиҙ
Китәсәк,
Йәй уртаһы йәнгә ҡыштар
Киләсәк...

***

Мин һаман да көләм әле,
Мин һаман да йылмаям.
Минең башым һаман ғорур,
Күҙҙәрем һаман шаян.

Мин һаман да көләм әле...
Һин аптырайһың, беләм.
Аңламайһың, мин бит бары
Иламаҫ өсөн көләм...

***

Өмөт янып,
Бәхет көттө...
Белде:
Алда ул, киләсәк!
Һөйөү килде.
Өмөт килде!
Ап-аҡ бәхет атты сәсәк!

Йән әрнетеп,
Һөйөү китте...
Шинде-кипте бәхет-сәсәк...
Һөйөү үлде...
Бәхет һүнде...
Өмөттөң үлмәүе ғәжәп!

***

Күҙҙәр менән «ашайым» һине,
Һинең күҙҙәр «ҡапшай» мине...
Мөмкин булһа йотор инең
Бер ҡалаҡҡа һалып мине.

Минең наҙҙар — һинең хыял.
Минең һөйөү — һинең өмөт.
Хыял ҡайсаҡ ысынға аша
Тәүәккәллерәк булһаң, егет...

Бик ҡыҙғаныс, ғүмер үтә
Һинең — минһеҙ,
минең — һинһеҙ...
Арабыҙҙа һаман да шул —
«Иҫәнмеһегеҙ?!» —
«Иҫәнмеһегеҙ...»

***

Сарсау баҫып, һыуҙар эсәм,
Һалҡыны бар, тәме юҡ...
Аҡҡан шишмә аға инде,
Уның миндә ғәме юҡ...

Ҡайсағында был донъяның
Ҡыҙығы бар, йәме юҡ...
Күңелемдә өмөтөмдөң
Шәмдәле бар, шәме юҡ...